Документ подписан простой электронной подписью
Информация о владельце:
ФИО: Сыров Игорь Анатольевич
Должность: Директор
Дата подписания: 28.06.2022 11:29:08
Уникальный программный ключ:
b683afe664d7e9f64175886cf9626a198149ad36

СТЕРЛИТАМАКСКИЙ ФИЛИАЛ
ФЕДЕРАЛЬНОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО БЮДЖЕТНОГО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОГО
УЧРЕЖДЕНИЯ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ»

Факультет ***Башкирской и тюркской филологии***
Кафедра ***Башкирской филологии***

**Рабочая программа дисциплины (модуля)**

дисциплина ***Б1.В.03 История башкирского языка***

часть, формируемая участниками образовательных отношений

Направление

***44.03.05*** ***Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки)***
код наименование направления

Программа

***Родной (башкирский) язык и литература, Русский язык***

Форма обучения

**Заочная**

Для поступивших на обучение в
**2020 г.**

Разработчик (составитель)
***кандидат филологических наук, доцент***
***Арсланова М. С.***
ученая степень, должность, ФИО

Стерлитамак 2022

**1. Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с установленными в образовательной программе индикаторами достижения компетенций** ........ 3

**2. Цели и место дисциплины (модуля) в структуре образовательной программы** ........ 3

**3. Объем дисциплины (модуля) в зачетных единицах с указанием количества академических или астрономических часов, выделенных на контактную работу обучающихся с преподавателем (по видам учебных занятий) и на самостоятельную работу обучающихся** ........ 4

**4. Содержание дисциплины (модуля), структурированное по темам (разделам) с указанием отведенного на них количества академических часов и видов учебных занятий** ........ 4

4.1. Разделы дисциплины и трудоемкость по видам учебных занятий (в академических часах) ........ 4

4.2. Содержание дисциплины, структурированное по разделам (темам) ........ 5

**5. Учебно-методическое обеспечение для самостоятельной работы обучающихся по дисциплине (модулю)** ........ 10

**6. Учебно-методическое и информационное обеспечение дисциплины (модуля)** ........ 17

6.1. Перечень учебной литературы, необходимой для освоения дисциплины (модуля) ........ 17

6.2. Перечень электронных библиотечных систем, современных профессиональных баз данных и информационных справочных систем ........ 17

**1. Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с установленными в образовательной программе индикаторами достижения компетенций**

| Формируемая компетенция (с указанием кода) | Код и наименование индикатора достижения компетенции | Результаты обучения по дисциплине (модулю) |
|---|---|---|
| ПК-2. Способен выделять структурные элементы, входящие в систему познания предметной области (в соответствии с профилем и уровнем обучения), анализировать их в единстве содержания, формы и выполняемых функций | ПК-2.1. Знает структурные элементы, входящие в систему познания предметной области, выделяет и анализирует единицы различных уровней языковой системы в единстве их содержания, формы и функций, мир художественного произведения как культурно-эстетического феномена и литературных явлений в их структурном единстве и функциях. | Обучающийся должен: знать<br>- основы башкирского языка и языкознания;<br>- методы исследования периодов истории башкирского литературного языка ;<br>-нормы башкирского языка; -периоды в истории литературного языка. |
| | ПК-2.2. Умеет находить структурные элементы, входящие в систему познания предметной области, анализировать, синтезировать, применять системный подход в соответствии с поставленными задачами. | Обучающийся должен: уметь<br>- различать периоды в истории .башкирского литературного языка;<br>- различать тексты различных периодов башкирского литературного языка. |
| | ПК-2.3. Владеет навыками анализа и интерпретации литературных и языковых явлений в единстве содержания, формы и выполняемых функций. | Обучающийся должен: владеть<br>- навыками анализа текстов разных периодов истории башкирского языка,<br>- нормами литературного языка и применением их на практике. |

**2. Цели и место дисциплины (модуля) в структуре образовательной программы**

Цели изучения дисциплины:

1. Знать историю возникновения башкирского литературного языка, источники и периоды.
2. Знать нормы башкирского языка и их использование на практике.

Дисциплина «История башкирского языка» относится к части, формируемой участниками образовательных отношений.

Дисциплина изучается на 5 курсе в 9, 10 семестрах

**3. Объем дисциплины (модуля) в зачетных единицах с указанием количества академических или астрономических часов, выделенных на контактную работу обучающихся с преподавателем (по видам учебных занятий) и на самостоятельную работу обучающихся**

Общая трудоемкость (объем) дисциплины составляет 216 акад. ч.

| **Объем дисциплины** | **Всего часов** |
|---|---|
| | **Заочная форма обучения** |
| Общая трудоемкость дисциплины | 216 |
| Учебных часов на контактную работу с преподавателем: | |
| лекций | 16 |
| практических (семинарских) | 30 |
| другие формы контактной работы (ФКР) | 1,2 |
| Учебных часов на контроль (включая часы подготовки): | 7,8 |
| экзамен | |
| Учебных часов на самостоятельную работу обучающихся (СР) | 161 |

| **Формы контроля** | **Семестры** |
|---|---|
| экзамен | 10 |

**4. Содержание дисциплины (модуля), структурированное по темам (разделам) с указанием отведенного на них количества академических часов и видов учебных занятий**

**4.1. Разделы дисциплины и трудоемкость по видам учебных занятий (в академических часах)**

| **№ п/п** | **Наименование раздела / темы дисциплины** | **Виды учебных занятий, включая самостоятельную работу обучающихся и трудоемкость (в часах)** | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **Контактная работа с преподавателем** | | | **СР** |
| | | **Лек** | **Пр/Сем** | **Лаб** | |
| **1** | **История литературного языка донационального периода** | **4** | **8** | **0** | **0** |
| 4.1 | История литературного языка начала XX века | 2 | 4 | 0 | 0 |
| 1.1 | История литературного языка с древнейших времен и до формирования национального языка | 2 | 6 | 0 | 0 |
| 1.2 | Язык древних тюркских, средневековых памятников и тюрки Урало-Поволжья. Древнетюркские руны | 2 | 2 | 0 | 0 |
| **2** | **История литературного языка со второй половины XVI и XVIII веков** | **2** | **4** | **0** | **40** |
| 2.1 | История литературного языка со | 2 | 4 | 0 | 40 |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | второй половины XVI и XVIII веков | | | | |
| **3** | **История литературного языка XIX в.** | **2** | **8** | **0** | **80** |
| 3.1 | История литературного языка XIX в. | 2 | 8 | 0 | 80 |
| **4** | **История литературного языка начала XX века** | **2** | **4** | **0** | **0** |
| 5.1 | История литературного языка после 1917 г. и до наших дней | 2 | 2 | 0 | 41 |
| **5** | **История литературного языка после 1917 г. и до наших дней - национальный период литературного языка** | **6** | **6** | **0** | **41** |
| 5.2 | Лексика, фонетика, грамматика и стилистика современного башкирского литературного языка | 4 | 2 | 0 | 0 |
| 5.3 | Развитие современного башкирского литературного письменного языка. Особенности норм литературного языка | 0 | 2 | 0 | 0 |
| | **Итого** | **16** | **30** | **0** | **161** |

### 4.2. Содержание дисциплины, структурированное по разделам (темам)

Курс лекционных занятий

| № | Наименование раздела / темы дисциплины | Содержание |
|---|---|---|
| **1** | **История литературного языка донационального периода** | |
| 4.1 | История литературного языка начала XX века | Хәҙерге башҡортәҙәби телен булдырыуға тәүге ынтылыштар (XIX быуат аҙағы-XX быуат башы).<br>В.В.Катаринский (1846-1902) авторлығында 1892 йылда сыҡҡан, Н.Ф.Катановтың (1862-1922) 1898 йылда, А.Г.Бессоновтың (1848-1918) 1907 йылда донъя күргән башҡорттар өсөн беренсе әлифбалары.<br>Һүҙлектәр: «Краткий русско-башкирский словарь» (Ырымбур, 1893; 1899-1900).<br>Башҡорт әҙәби тел тарихында М.С.Ҡулаевтың(1873-1958) роле, уның авторлығында сыҡҡан «Башҡорттар өсөн өндәрҙең әйтелеш нигеҙҙәре һәм әлифба» (Ҡаҙан, 1912).<br>XX быуат башындағы башҡорт поэзияһының теле. М.Ғафури (1880-1934); А.Таһиров (1890-1937); Д.Юлтый (1893-1938); Ш.Бабич (1894-1919) әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәре.<br>С.Яҡшығолов (1871-1931), Ф.Туйкин (1887-1938), М.Буранғолов (1888-1966) әҫәрҙәренең башҡорт халыҡ теленә яҡынлығы.<br>XX быуат башындағы башҡорт прозаһының теле.<br>Драма әҫәрҙәре.<br>Башҡорт баҫмаһының (прессаһының) теле.<br>Башҡорт милли яҙма әҙәби теленең барлыҡҡа килеүе, уның сығанаҡтары. |
| 1.1 | История литературного | Башҡорт теле – башҡорт халҡының теле. Башҡорт |

| | | |
|---|---|---|
| | языка с древнейших времен и до формирования национального языка | әҙәби теле төшөнсәһе. Әҙәби тел тарихы, уның өйрәнеү обьекты, бурысы, сығанаҡтары. Әҙәби тел тарихының периодтарға бүленеше. Ж.Ғ.Кейекбаев, Ғ.Б.Хөсәйенов дәреслек авторҙары классификациялары.<br>Әҙәби тел нормалары: орфоэпик, орфографик, лексик, грамматик һәм стилистик нормалар. |
| 1.2 | Язык древних тюркских, средневековых памятников и тюрки Урало-Поволжья. Древнетюркские руны | Төрки халыҡтарының ҡәрҙәшлеге.<br>Ҡәрҙәш телдәрҙең барлыҡка килеүе һәм классификацияһы.<br>Милләт формалашҡансыға тиклемге төрки әҙәби телдәрҙең үҫеш юлдары: руна осоро (Ә.Р.Тенишев периодизацияһы).<br>Орхон, Йәнәсәй һәм Алтай руналары. Башҡортостанда руник яҙмалар һәм ырыу тамғалары.<br>Төрки халыҡтарҙа әҙәби телдәр:<br>Боронғо уйғыр әҙәби теле (VIII-XVIII быуаттар).<br>Ҡарахан-уйғыр әҙәби теле (XI- XII быуаттар).<br>Хорезм-төрки әҙәби теле (XIII- XIV быуаттар).<br>Сығатай әҙәби теле (XV -XIX быуаттар).<br>Әҙәби «төрки» теле үҙенең варианттары менән. Һәр телгә хас үҙенсәлектәр. |
| **2** | **История литературного языка со второй половины XVI и XVIII веков** | |
| 2.1 | История литературного языка со второй половины XVI и XVIII веков | XVI-XVIII быуаттарҙағы әҙәби тел тарихы: шәжәрә һәм риүәйәттәр; үтенес яҙмалары (жалобалар); тәуарихтар; халыҡ ижады әҫәрҙәре теле.<br>Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән ырыуҙары шәжәрәләренең тел-стиль үҙенсәлектәре.<br>Тәүарих яҙмалары: Хисаметдин Мөслөмиҙең "Тәуарихи-и Болғарийа" (XVIII быуат аҙағы-XIX быуат башы); Т.Ялсығоловтың "Тарих намә-и болғар" (1805 й.); Ғ.Соҡоройҙоң "Тәуарих-и Болғарийа йәки Тәҡриб-и Ғәри" (XIX быуат аҙағы) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.<br>Халыҡ ижады әҫәрҙәре теле. |
| **3** | **История литературного языка XIX в.** | |
| 3.1 | История литературного языка XIX в. | XIX быуаттың тәүге яртыһындағы әҙәби тел тарихы.<br>Суфыйсылыҡ әҙәбиәте әҫәрҙәренең тел һәм стиль үҙенсәлектәре.<br>Мәүлә Ҡолой (XVII быуаттың икенсе яртыһы); Утыҙ Имәни (Ғәбдерәхим Усман (1752-1836); Мәнди Ҡотош Ҡыпсаҡи (1763-1849) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.<br>Тажетдин Ялсығолов әл-Башҡорди (1767-1838); Шәмсетдин Зәки (1822-1865); Әбделмәних Ҡарғалы (1782-1833) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.<br>Һибәтулла Сәлихов (1794-1867); Ғәли Соҡорой (1826-1889) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.<br>XIX быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәби тел тарихы.<br>М.Иванов, С.Күкләшев, М.Биксурин авторлығындағы уҡыу әсбаптарының үҙенсәлектәре.<br>XIX быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәби тел тарихы.<br>М.Иванов, С.Күкләшев, М.Биксурин авторлығындағы уҡыу әсбаптарының үҙенсәлектәре. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Мәғрифәтселек әҙәбиәте әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәре. М.Аҡмулла (1831-1895). М.Өмөтбаевтың грамматикаһының башҡорт тел ғилемендә тотҡан урыны. |
| **4** | **История литературного языка начала XX века** | |
| 5.1 | История литературного языка после 1917 г. и до наших дней | Башҡорт әҙәби теленең барлыҡҡа килеүе. Әҙәби тел сығанаҡтары. |
| **5** | **История литературного языка после 1917 г. и до наших дней - национальный период литературного языка** | |
| 5.2 | Лексика, фонетика, грамматика и стилистика современного башкирского литературного языка | Башҡорт теленең лексикаһы, уның барлыҡҡа килеүе, формалашыуы һәм үҫеше. |

Курс практических/семинарских занятий

| № | Наименование раздела / темы дисциплины | Содержание |
|---|---|---|
| **1** | **История литературного языка донационального периода** | |
| 4.1 | История литературного языка начала XX века | XX быуат башындағы башҡорт поэзияһының теле. М.Ғафури (1880-1934); А.Таһиров (1890-1937); Д.Юлтый (1893-1938); Ш.Бабич (1894-1919) әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәре. С.Яҡшығолов (1871-1931), Ф.Туйкин (1887-1938), М.Буранғолов (1888-1966) әҫәрҙәренең башҡорт халыҡ теленә яҡынлығы. XX быуат башындағы башҡорт прозаһының теле. Драма әҫәрҙәре. Башҡорт баҫмаһының (прессаһының) теле. |
| 1.1 | История литературного языка с древнейших времен и до формирования национального языка | Башҡорт теле – башҡорт халҡының теле. Башҡорт әҙәби теле төшөнсәһе. Әҙәби тел тарихы, уның өйрәнеү обьекты, бурысы, сығанаҡтары. Әҙәби тел тарихының периодтарға бүленеше. Ж.Ғ.Кейекбаев, Ғ.Б.Хөсәйенов дәреслек авторҙары классификациялары. Әҙәби тел нормалары: орфоэпик, орфографик, лексик, грамматик һәм стилистик нормалар. Төрки халыҡтарының ҡәрҙәшлеге. Ҡәрҙәш телдәрҙең барлыҡҡа килеүе һәм классификацияһы. Милләт формалашҡансыға тиклемге төрки әҙәби телдәрҙең үҫеш юлдары: руна осоро(Ә.Р.Тенишев периодизацияһы). Орхон, Йәнәсәй һәм Алтай руналары. Башҡортостанда руник яҙмалар һәм ырыу тамғалары. Төрки халыҡтарҙа әҙәби телдәр: Боронғо уйғыр әҙәби теле (VIII-XVIII быуаттар). Ҡарахан-уйғыр әҙәби теле (XI- XII быуаттар). Хорезм-төрки әҙәби теле (XIII- XIV быуаттар). Сығатай әҙәби теле (XV -XIX быуаттар). Әҙәби «төрки» теле үҙенең варианттары менән. Һәр телгә хас үҙенсәлектәр. |

| | | |
|---|---|---|
| 1.2 | Язык древних тюркских, средневековых памятников и тюрки Урало-Поволжья. Древнетюркские руны | Төрки халыҡтарҙа яҙма культураның таралыуы. Төрки халыҡтарҙа яҙма культураның таралыуы. Йософ Баласағунлы “Котаҙғу белек” (1068 й.). Башҡорт әҙәби теленең тарихы күҙлегенән характеристика биреү. Мәхмүт Ҡашғари “Диуану лөғәт әт-төрк” (1072-1074 й.);“Уғыҙнамә” китабы.<br>“Ҡорҡот ата китабы” әҫәрҙәре теле. Башҡорт әҙәби теленең тарихы күҙлегенән характеристика биреү. Башҡорт-болғар әҙәби бәйләнештәре.<br>XI-XIII быуаттарҙағы башҡорт-болғар әҙәби бәйләнештәре.<br>Ҡол Ғәлиҙең “Кисса-йи Йософ” (йәки “Йософ вә Зөләйха, “Йософ китабы” (1212-1233 й.) әҫәренең тел-стиль үҙенсәлектәре.<br>Тарихи шәхес буларак Ҡол Ғәли тураһында башҡорт, татар ғалимдары фекерҙәре.<br>Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәте теле<br>Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәте теле (XIII быуаттың икенсе яртыһынан XVI быуаттың тәүге яртыһы) (XIII быуаттың икенсе яртыһынан XVI быуаттың тәүге яртыһы).<br>“Китаб-и мәджмуға-йи тәрджүмән-и төрки вә әджеми вә мөғли вә фарси” (“Тәржемәғи төрки вә ғәрәби һүҙлеге”).<br>“Кодекс Куманикус” (“Ҡоман мәжмуғаһы” * 1303 й.) әҫәрҙәренең хәҙерге башҡорт әҙәби теленә мөнәсәбәте һәм тел-стиль үҙенсәлектәре.<br>Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәтендә билдәле әҫәрҙәр<br>Ҡотб “Хөсрәү вә Ширин” (1341-1342 й.).<br>Харәзми “Мөхәббәтнамә” (1353-1354 й.). Хөсәм Кәтиб “Жөмжөмә солтан.<br>Сәйф Сараи “Гөлстан бит-төрки” (1391-1392 й) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре. |
| **2** | **История литературного языка со второй половины XVI и XVIII веков** | |
| 2.1 | История литературного языка со второй половины XVI и XVIII веков | Дөйөм башҡорт халыҡ теле, уның формалашыуы (башҡорттарҙың дөйөм халыҡ булып ойошоу процесы). XVI-XVIII быуаттарҙағы әҙәби тел тарихы: шәжәрә һәм риүәйәттәр; үтенес яҙмалары (жалобалар); тәуарихтар; халыҡ ижады әҫәрҙәре теле.<br>Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән ырыуҙары шәжәрәләренең тел-стиль үҙенсәлектәре.<br>Тәүарих яҙмалары: Хисаметдин Мөслөмиҙең “Тәуарихи-и Болғарийа” (XVIII быуат аҙағы-XIX быуат башы); Т.Ялсығоловтың “Тарих намә-и болғар” (1805 й.); Ғ.Соҡоройҙоң “Тәуарих-и Болғарийа йәки Тәкриб-и Ғәри” (XIX быуат аҙағы) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре. Халыҡ ижады әҫәрҙәре теле. |
| **3** | **История литературного языка XIX в.** | |
| 3.1 | История литературного языка XIX в. | XIX быуаттың тәүге яртыһындағы әҙәби тел тарихы. Суфыйсылыҡ әҙәбиәте әҫәрҙәренең тел һәм стиль үҙенсәлектәре. Мәүлә Ҡолой (XVII быуаттың икенсе |

| | | |
|---|---|---|
| | | яртыһы); Утыҙ Имәни (Ғәбдерәхим Усман (1752-1836); Мәнди Ҡотош Ҡыпсаҡи (1763-1849) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре. Тажетдин Ялсығолов әл-Башҡорди (1767-1838); Шәмсетдин Зәки (1822-1865); Әбделмәних Ҡарғалы (1782-1833) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре. Һибәтулла Сәлихов (1794-1867); Ғәли Соҡорой (1826-1889) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.<br>XIX быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәби тел тарихы. М.Иванов, С.Күкләшев, М.Биксурин авторлығындағы уҡыу әсбаптарының үҙенсәлектәре.<br>XIX быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәби тел тарихы. М.Иванов, С.Күкләшев, М.Биксурин авторлығындағы уҡыу әсбаптарының үҙенсәлектәре.<br>Мәғрифәтселек әҙәбиәте әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәре. М.Аҡмулла (1831-1895).<br>М.Өмөтбаевтың грамматикаһының башҡорт тел ғилемендә тотҡан урыны.<br>Хәҙерге башҡортәҙәби телен булдырыуға тәүге ынтылыштар (XIX быуат аҙағы-XX быуат башы). В.В.Катаринский (1846-1902) авторлығында 1892 йылда сыҡҡан, Н.Ф.Катановтың (1862-1922) 1898 йылда, А.Г.Бессоновтың (1848-1918) 1907 йылда донъя күргән башҡорттар өсөн беренсе әлифбалары.<br>Һүҙлектәр: «Краткий русско-башкирский словарь» (Ырымбур, 1893; 1899-1900).<br>Башҡорт әҙәби тел тарихында М.С.Ҡулаевтың(1873-1958) роле, уның авторлығында сыҡҡан «Башҡорттар өсөн өндәрҙең әйтелеш нигеҙҙәре һәм әлифба» (Ҡаҙан, 1912). |
| **4** | **История литературного языка начала XX века** | |
| 5.1 | История литературного языка после 1917 г. и до наших дней | Башҡорт милли яҙма әҙәби теленең барлыҡҡа килеүе, уның сығанаҡтары.<br>Ғәрәп графикаһы осоро. Иҫкеәлеп, яңыәлеп. Комиссия эштәре. Ш.Хоҙайбирҙин һ.б. эшмәкәрлеге.<br>Алфавитты булдырыу, дәреслектәр сығарыу, башҡорт теленең нормаларын эшләү.<br>Латин графикаһыосоро: әҙәби телдең артабанғы үҫеше, функциональ стилдәрҙең формалашыуы.<br>Рус графикаһына күсеү, алфавит һәм орфографияның артабанғы үҫеше. |
| **5** | **История литературного языка после 1917 г. и до наших дней - национальный период литературного языка** | |
| 5.2 | Лексика, фонетика, грамматика и стилистика современного башкирского литературного языка | Башҡорт теленең лексикаһының үҫеше.<br>Башҡорт теленең лексикаһының камиллашыуы, байыуы.<br>"Башҡорт теле һүҙлеге" (М., 1993), "Башҡорт теленең академик һүҙлеге" (10) томда: дөйөм һәм айырмалы яҡтары. Башҡорт теленең орфоэпияһы һәм фонетикаһы үҙенсәлектәре.<br>Орфоэпия. Башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләре. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Фонетика үҙенсәлектәре.<br>Ж.Ғ. Кейекбаевтың башҡорт теле фонеткаһына һәм орфоэпияһына индергән өлөшө.<br>Башҡорт теленең орфографияһы.<br>Башҡорт теленең дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре.<br>1957-58 й. орфографияны камиллаштырыу буйынса дискуссия.<br>1981 йылда орфографияға индергән үҙгәрештәр.<br>Р.Ғ.Аҙнағоловтың "Башҡорт теленең орфография һүҙлеге" (1998). |
| 5.3 | Развитие современного башкирского литературного письменного языка. Особенности норм литературного языка | Башҡорт теленең грамматик ҡоролошо<br>Әҙәби телдең грамматик ҡоролошо һәм уның үҫеше.<br>Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматик ҡоролошо, уның халыҡ һөйләү теле нигеҙендә формалашыуы һәм үҫеше.<br>Грамматик нормалар.<br>Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматикаһы (М., 1981).<br>Башҡорт теленең грамматикаһы (3 томда).<br>Башҡорт теленең стилдәренең үҫеше.<br>Төрки әҙәби телдәрендә стилистик дифферинция.<br>Публицистик стилдең барлыҡҡа килеүе. Салауат өндәмәһе.<br>Батыршаның батшаға яҙған хатында публицистик һыҙаттар.<br>Публицистик стиль өсөн хас үҙенсәлектәр.<br>Рәсми эш ҡағыҙҙары стиленең үҫеше.<br>Хаттар стиленең үҫеше.<br>Халыҡ ижады стиле нигеҙендә матур әҙәбиәт стиле барлыҡҡа килеүе.<br>Фәнни стилдең нигеҙҙәре.<br>Башҡорт теленең фән булып формалашыу осоро<br>XX быуатта башҡорт теленең фән булып формалашыуы<br>Периодтары .<br>Үҫеш осоро.<br>Камиллашыу осоро. |

**5. Учебно-методическое обеспечение для самостоятельной работы обучающихся по дисциплине (модулю)**

На самостоятельное изучение выносятся следующие темы:

1. Язык древних тюркских, средневековых памятников и тюрки Урало-Поволжья: Төрки халыҡтарҙа яҙма культураның таралыуы. Төрки халыҡтарҙа яҙма культураның таралыуы. Йософ Баласағунлы “Ҡотаҙғу белек” (1068 й.). Башҡорт әҙәби теленең тарихы күҙлегенән характеристика биреү. Мәхмүт Ҡашғари “Диуану лөғәт әт-төрк” (1072-1074 й.);“Уғыҙнамә” китабы. “Ҡорҡот ата китабы” әҫәрҙәре теле. Башҡорт әҙәби теленең тарихы күҙлегенән характеристика биреү. Башҡорт-болғар әҙәби бәйләнештәре. XI-XIII

быуаттарҙағы башҡорт-болғар әҙәби бәйләнештәре. Ҡол Ғәлиҙең “Ҡисса-йи Йософ” (йәки “Йософ вә Зөләйха, “Йософ китабы” (1212-1233 й.) әҫәренең телстиль үҙенсәлектәре. Тарихи шәхес булараҡ Ҡол Ғәли тураһында башҡорт, татар ғалимдары фекерҙәре. Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәте теле Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәте теле (XIII быуаттың икенсе яртыһынан XVI быуаттың тәүге яртыһы) (XIII быуаттың икенсе яртыһынан XVI быуаттың тәүге яртыһы). “Китаб-и мәджмуға-йи тәрджүмән-и төрки вә әджеми вә мөғли вә фарси” (“Тәржемәғи төрки вә ғәрәби һүҙлеге”). “Кодекс Куманикус” (“Ҡоман мәжмуғаһы” * 1303 й.) әҫәрҙәренең хәҙерге башҡорт әҙәби теленә мөнәсәбәте һәм тел-стиль үҙенсәлектәре. Ҡыпсаҡ осоро әҙәбиәтендә билдәле әҫәрҙәр Ҡотб “Хөсрәү вә Ширин” (1341-1342 й.). Харәзми “Мөхәббәтнамә” (1353-1354 й.). Хөсәм Кәтиб “Жөмжөмә солтан. Сәйф Сараи “Гөлстан бит-төрки” (1391-1392 й) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.

2. История литературного языка со второй половины XVI и XVIII веков:

Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән ырыуҙары шәжәрәләренең 9 тел-стиль үҙенсәлектәре. Тәүарих яҙмалары: Хисаметдин Мөсләмиҙең “Тәуарихи-и Болғарийа” (XVIII быуат аҙағы-XIX быуат башы); Т.Ялсығоловтың “Тарих намә-и болғар” (1805 й.); Ғ.Соҡоройҙоң “Тәуарих-и Болғарийа йәки Тәкриб-и Ғәри” (XIX быуат аҙағы) әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.

3. История литературного языка 2-ой половины XIX в.:

XIX быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәби тел тарихы. М.Иванов, С.Күкләшев, М.Биксурин авторлығындағы уҡыу әсбаптарының үҙенсәлектәре. Мәғрифәтселек әҙәбиәте әҫәрҙәренең тел-стиль үҙенсәлектәре. М.Аҡмулла (1831-1895). М.Өмөтбаевтың грамматикаһының башҡорт тел ғилемендә тотҡан урыны.

4. История литературного языка начала XX века: Хәҙерге башҡорт әҙәби телен булдырыуға тәүге ынтылыштар (XIX быуат аҙағы-XX быуат башы). В.В.Катаринский (1846-1902) авторлығында 1892 йылда сыҡҡан, Н.Ф.Катановтың (1862-1922) 1898 йылда, А.Г.Бессоновтың (1848-1918) 1907 йылда донъя күргән башҡорттар өсөн беренсе әлифбалары. Һүҙлектәр: «Краткий русско-башкирский словарь» (Ырымбур, 1893; 1899-1900). Башҡорт әҙәби тел тарихында М.С.Ҡулаевтың(1873- 1958) роле, уның авторлығында сыҡҡан «Башҡорттар өсөн өндәрҙең әйтелеш нигеҙҙәре һәм әлифба» (Ҡаҙан, 1912).

5. История литературного языка после 1917 г. и до наших дней: Ғәрәп графикаһы осоро. Иҫкеәлеп, яңыәлеп. Комиссия эштәре. Ш.Хоҙайбирҙин һ.б. эшмәкәрлеге. Алфавитты булдырыу, дәреслектәр сығарыу, башҡорт теленең нормаларын эшләү. Латин графикаһыосоро: әҙәби телдең артабанғы үҫеше, функциональ стилдәрҙең формалашыуы. Рус графикаһына күсеү, алфавит һәм орфографияның артабанғы үҫеше.

Үҙ аллы эшләү өсөн текстар

А) 1. Әҙәби тел тарихын периодтарға бүлеү.

2. Бирелгән текстҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама биреү.

«Беҙҙең башҡорттар ысболош йөрөгәндәр. Юрматы эсендәге ерҙәр иркен улған. Ер бүлеме булмаған. Йәйләү күсеп, бейә бәйләп, ҡымыҙ эсеп, фәрәуанлыҡ улып, ашлыҡты әҙ сәсеп, күп алып, бик бәрәкәт улған. Был Суҡайлы буйына егерме ауыл күсеп ултырар ирҙеләр. Торышлы башына ете ауыл күсәр ирҙеләр. Ташлыйар тамағына унлап ауыл күсәр ирҙеләр».

«Юрматы ҡәбиләһе башҡорттары шәжәрәһенә ҡушымта».

Б) 1. Әҙәби тел тарихының өйрәнеү обьекты, бурысы, сығанаҡтары.

2. Бирелгән тексҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Ашлыҡты аҙ сәсеп, күп алыр ирҙек. Тары сәсеме ат өҫтөнән сәсер ирҙеләр. Беҙҙең башҡорт йәмғиәте бик аҙ сәсер ирҙе. Хөкөм илән ҡыҫтап сәстерәр ирҙе мәхкәмә. Бер дә сәсмәгән кемсәнәне «Ник сәсмәйһең?»– тип атбитка алып, ороп-һуҡҡандар. Унан һуң беҙҙең башҡорт йәмәғәтенә душ башына берәр эсмәң арыш сәсеүгә әмер булған».

«Юрматы ҡәбиләһе башҡорттары шәжәрәһенә ҡушымта».

В) 1.Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡылары һәм башҡорт ырыу тамғалары.

2. Бирелгән тексҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама .

«Вәжүдкә килеүем сәнәи һижриә 1091 сәнә сәнәи миладиәд 1680 сәнә. Йәтим бала улмаҡиан аҙ ғилемле улдым. Мал утлатып йөрөгән ҡаҙаҡлар бәне алып ҡайтып киттеләр беҙҙә мөлдәкә ултырһың тип. Бән разый улдым. Жайыҡтың ҡыбланан төнгә ҡарай бөгөлгән ерендә ҡаҙаҡ мәкамына барғанда бәңә 20 сәнә ирҙе. Биш йыл мөлдәкә улғас, бер ҡаҙаҡ бейе бәңә зәүжәлеккә ҡыҙын вирҙе». «Ялан Бөрйән ырыуы шәжрәһе».

Г) 1. Шәжәрәләрҙең тел үҙенсәлектәре.

2. Бирелгән тексҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама. «Ҡояштың бөтөн йыһанға таралған зыяһы илә кәсеб ләтафәт иткән инең, һин нә ҡәҙәргүзәл вә нә ҡәҙәр ҙә хуш еҫле инең. Аһ, хаин! Берәү һиңә ҡул һуҙҙы, ботағыңды ҡуптарҙы, еҫкәне, үҙенең бер ләхзалыҡ зауҡына һине ҡорбан итте. Башҡалар ҙа хәлеңә мәрхәмәт итмәйенсә вә ҡыҙғанмайынса һине таптап үтәләр»

«Туҙан-тупраҡ араһында ҡалған бер сәскәгә бер хитап».

Ғ) 1. Суфыйсылыҡ әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.

2. Бирелгән тексҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Әл-ҡисса, мәғлүм ки, бән кәминә сабый ваҡытымда «Тәуарихи Болғарийа» китабыны үҙе ҡәләмем илә нәкел иткән инем. Күп урында ғаҡылыма тоғро килмәгән һүҙҙәренә инҡаран һалған инем вә күп урында телем илә хилафтарыны азһар ҡылған инем».

Ғ.Соҡорой«ТәуарихиБолғарийа, йәкиТәкрибиҒари».

Д) 1. Мәғрифәтселек әҫәрҙәренең тел үҙенсәлектәре.

2. Бирелгән текстҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Өсөнсө дәүер» – юғарыла әйтелгәнсә, ике телдә сығып килгән газета уҡыусылар араһында яратмаусылы ҡтыуғас, йәки икенсе төрлө итеб әйткәндә, башҡорт массаһына башҡорт телендә әҙәбиәт төҙөү кәрәклеге ныҡ һиҙелгәс, Башҡортостан хөкүмәте һәр ике телдә лә газета сығарырға ҡарар яһаб шуны ғәмәлгә ҡуйҙы. Бына был һуңғы дәүерҙе «Башҡортостан» газетаһының бер йылы тиб атайбыҙ»…«Башҡортостан», 1924, № 95.

З) 1. Ғәрәп графикаһы осоро.

2. Бирелгән текстҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Борын бер ҡарт бар ийе ди. Аның өс уғлы бар ийе ди. Кескәйе таз ийе ди. Ҡарт балаларына «йәйә уҡ йасаңыз да атуңыз! Уғыңыз ҡайда төшсә, шунан ҡыз алуб бирермен» диб, әйтде ди».

М.Ғафури. «Башҡорт шиүәсендә әкиәт».

Ҙ) 1. Латин графикаһы осоро.

2. Бирелгән текстҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Зимства чыҡған йылдан башлаҡ, Оринбургски почтавый йулда Ҡамышлы чуаш ауылында Өршәк дарйасына күперне һәм гатларны йахшы итүб зимства йасатсун диб дәғүәләшдек. Мәғлүмдер, әүәлендә почтавый һәм прасилучный йуллар һәм күпер төзәтеү шаһәнә һәм зимский налуг түләй торған крәстийән башҡорт, мишәр, тибтәр, чуаш вә ғәйре йасаҡ түләй торған халыҡның зәммәсендә иде...». М.Өмөтбаев. «Өршәк күпере».

Й) 1. Руна осоро.

2. Бирелгән текстҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Тарих мең дә етмеш бердә ирде. Башҡорд рус белән яғы булды. Барс йылы ирде. Андин суң мең дә етмеш туҡызда ирде: Плид – ҡазаҡ яғы булды. Мең дә сиксән туҡызда ирде: асманда Бер яҡты өлкән йолдоз пәйда булды. Көндин төн яҡтылығы артды…»

И) 1. Боронғо уйғыр әҙәби теле осоро.

2. Бирелгән текстҡа әҙәби тел күҙлегенән ҡылыҡһырлама.

«Русия тарихының арғы яғында Даниал тигән кеше булған. Ҡулында тыб китабы булған. Шул тыб китабыгда күренә икән: диңгеҙ уртаһында бер йәшел ағас бар. Шул ағастың япрағын ҡайнатып эсһәң, кеше үлмәй икән, мәңге йәшәй икән. Уны ҡалай итеп алырға? Һыуҙа кешене батырмай икән бер ағастың япрағы. Анны ҡалай итеп эҙләп алырға?» «Даниал хикәйәте».

Текстар түбәндәге план буйынса тикшерелә

1.График-фонетик үҙенсәлектәр.

Яҙыуҙың телдең өндәр системаһын сағылдыра алыу кимәле. График-фонетик күренештәр. Һүҙҙәрҙең график-фонетик һүрәтләнешендә сиратлашыу. Мәҫәлән: уғыз-ҡыпсаҡ элементтары сиратлашыуы:

а) һүҙбашындавһәмбөндәрененңсиратлашыуы:

варды// барды, вирде // бирде һ.б.;

б) һүҙ башында б һәм м өндәренең сиратлашыуы:

бән // мән һ.б.;

в) һүҙ башында б өнөнөң килеү-килмәү осраҡтары:

улмыш // булмыш һ.б.;

г) һүҙ аҙағында ғ // у-ү өндәренең сиратлашыуы:

тағ // тау, бағ // бау һ.б.;

ғ) төрлө позицияла д һәм т өндәренең сиратлашыуы: даш // таш, йеде // йете, ад // ат һ.б.;

д) ж // з һәм й өндәренең сиратлашыуы:

сүзлә // сүйлә һ.б.;

е) з // н һәм й өндәренең сиратлашыуы:

ҡанда // ҡайда һ.б.;

ж) сингармонизм һаҡланыуы йәки һаҡланмауы: әүлийәләр, йортлары; әүлад (киләсәк быуын) һ.б.

2. Морфологик үҙенсәлектәр. Шулайуҡ Урал-Волгабуйы төрки теле миҫалында ҡарала.

Исемдәш һүҙ төркөмдәренә хас булған грамматик категориялар, уларҙың үҙенсәлектәре: уйғыр-ҡарлуҡ һәм уғыҙ-ҡыпсаҡ формалары.

Исемләшкән ҡылымдарҙың ғучы // гүче формаһы: гөнаһ ҡылғучы, файдати күргүче.

Хәбәрлек категорияһының тулы парадигмаһы.

Күпле кялғауҙарынан -ларһәм -ләр генә ҡулланылыуы: оруғлар, кемсәнәләр.

Исемдәш һүҙ төркөмдәрендә һан категорияһы, икеләтелгән күплектәр: хәлайыҡ-лар.

Килеш категорияһында боронғо һәм яңы формаларҙың сиратлашыуы:

а) боронғо уйғыр -дын // -дин һәм ҡыпсаҡ -дан // -дән сығанаҡ килеш ялғауҙары менән ҡулланылған һүҙҙәр: тарафдан // тарафдин, нәселәндин // нәселәндән;

б) уғыҙҙың -а // -ә, -йа// -йә һәм ҡыпсаҡтың -ғa// -гә төбәү килеш ялғауҙары менән килгән һүҙҙәр: тархана // тарханға, безә // беҙгә;

в) нуль ялғаулы төшөм килеш: нәрсәмез // нәрсәмезне һ.б.

Иҫке төркиҙә сифат, алмаш һан һүҙ төркөмдәренең нығыныуы, тотороҡланыуы:

а) олуғ // оло, ағыр // ауыр;

б) пең (мең), туғыз йөз илле туҡыз;

в) бән // мән (мин), андин (унан), анлар (улар), ошбу (ошо) һ.б.

Иҫке төркиҙә ҡылымдарҙың бирелеше.

Боронғо формалары:

а) ҡылым нигеҙенә -уң/ -үң, -ғыл-гел ялғауҙары ҡушып яһалған бойороҡ формаһы: көрүң, йүреткел;

б) -маз-мәз ялғаулы киләсәк заман ҡылымдың юҡлыҡ формаһы: ҡарамаз, килмәз;

в) -ғай-гәй формаһы: биргәй, улғай;

г) -мыш-меш үткән заман ялғаулы формаһы (бик йыш осрай): ҡалмыш, күммеш;

ғ) -маҡ-мәк ялғаулы ҡылымдың киң ҡулланылышлы булыуы: түләмәк, булмаҡы;

д) сифат ҡылымдың -мыш-меш, -дыҡ+ы, -дек+е, йан-йән, -ан-ән формалары: пешмеш (бешкән), ҡылдыҡи (ҡылған), терелдеке (терелгән) һ.б.;

е) -йу-йү ялғаулы хәл ҡылым: эстәйү (эҙләп);

ж) ул-, әйлә-, ҡыл- ярҙамсы ҡылымдар ҡулланыуы: сауыҡ ҡылған һ.б.

Ҡылымдың ҡыпсаҡ формаларынан:

а) -а, -ды, -ған, -ыр, -а иде, -ған иде ялғауҙары : дәфен улынған ер (күмелгән ер), ағар (ағыр);

б) хәбәр һөйкәлешендә -ычаҡ: барычаҡ (барасаҡ);

в) шарт һөйкәлешендә: -са: ачулса (асылһа);

г) хәл ҡылымда: -ыб, -ғач, -ғанчы: уғырлаб (урлап), йазыб идеек (йаҙып бирҙек);

ғ) бойороҡ һөйкәлешендә: нуль аффиксы;

д) сифат ҡылымда: -ған: чыҡарған китабымыз (сығарған);

е) уртаҡ ҡылымда: -ырға ялғауы ҡулланыла.

Шулай уҡ ярҙамсы һүҙ төркөмдәре:

бәйләүестәр: берлән-берлә-белә-илән, үчүн, суңра-суң, кезин, ғәйре һ.б.;

теркәүестәр: вә, ки, әммә, әгәр, вә һәм, мәгәр кем, чүнки һ.б.

3. Синтаксик үҙенсәлектәр.

Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр ҡулланылышы. Уларҙа һүҙ тәртибе. Мәҫәлән: Асыл Йурматының уғланлары Тухал Шәғали бинең оруғы күб үчүн, барча халайыҡлар би дәйеб әйтәләр (Юрматы ырыуы шәжәрәһенән).

Ғәрәп-фарсы һәм төрки изафеттары: ғүмере мөддәте-мөддәте ғүмере һ.б.

Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә ки, ким, зирә ки теркәүестәре ярҙамында эйәреүе. Хәл ҡылымдың -ыб формаһындағы эйәрсән һөйләмдәр.

Телмәр төрҙәре: монологик, тура телмәр үҙенсәлектәре.

4. Лексик-семантик үҙенсәлектәр.

Иҫке төркиҙең лексикаһы, уның төрлө ҡатламдарҙан ойошоуы. Боронғо һәм яңы һүҙҙәрҙең йәнәшә ҡулланылышы: чуҡ-күб, ҡары-ҡарт һ.б.

Килеп сығышы буйынса һүҙҙәргә анализ: дөйөм төрки, ориентализмдар (көнсығыш сығанаҡлы), урыҫ теленән үҙләштереүҙәр.

Диалект һүҙҙәре: ауырҙыҡ, ҡаҙаннаш һ.б. Халыҡ ижадына һәм йәнле һөйләү телмәренә хас һүҙҙәр ҡулланылышы.

5. Стилистик үҙенсәлектәр.

Һүҙҙең стилистик ҡатламы һәм ҡулланылышы.

Основная литература:

1. Арсланова М.С. История башкирского языка: Учебное пособие. - Стерлитамак: РИО СФ БГУ, 2015. (25 шт.)

2. История башкирского литературного языка / Башҡорт әҙәби теленең тарихы/ Ишбирҙин Э.Ф., Халиҡова Р.Х., Ғәләүетдинов И.Ғ. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. (53 шт.)

Дополнительная литература:

Ахмеров К.З. Из истории изучения башкирского письма / Әхмәров Ҡ.З. Башҡорт яҙыуы тарихынан. – Өфө: Башкортостан китап нәшриәте, 1972. (12 шт.)

Галяутдинов И.Г. Два века башкирского литературного языка. – Уфа: Гилем, 2000. (26 шт.)

Хусаинова Л.М. Башкирское письмо. Монография. – Стерлитамак: СФ БашГУ, 2012. (5 шт.)

**6. Учебно-методическое и информационное обеспечение дисциплины (модуля)**

**6.1. Перечень учебной литературы, необходимой для освоения дисциплины (модуля)**

**Основная учебная литература:**

1. Арсланова М.С. История башкирского языка: Учебное пособие. - Стерлитамак: РИО СФ БГУ, 2015. (25 шт.)
2. История башкирского литературного языка / Башҡорт әҙәби теленең тарихы/ Ишбирҙин Э.Ф., Халиҡова Р.Х., Ғәләүетдинов И.Ғ. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. (53 шт.)

**Дополнительная учебная литература:**

1. Хусаинова Л.М. Башкирское письмо. Монография. – Стерлитамак: СФ БашГУ, 2012. (5 шт.)
2. Ахмеров К.З. Из истории изучения башкирского письма / Әхмәров Ҡ.З. Башҡорт яҙыуы тарихынан. – Өфө: Башкортостан китап нәшриәте, 1972. (12 шт.)
3. Галяутдинов И.Г. Два века башкирского литературного языка. – Уфа: Гилем, 2000. (26 шт.)

**6.2. Перечень электронных библиотечных систем, современных профессиональных баз данных и информационных справочных систем**

| № п/п | Наименование документа с указанием реквизитов |
| --- | --- |